*Спартак ИЛЬЯСОВ*

# «Күңелдәргә бигерәк зауҡы икән...»

## «Иҫке Урал»

Башҡорт халҡының йыр поэзияһы башы булып, һис шикһеҙ, уның үлемһеҙ «Урал» йыры тора. Әммә был йыр «Яңы Урал» тип атала беҙҙә. Ни өсөн һуң «Яңы Урал»? «Иҫке Урал» йыры ни өсөн иҫке булғанын асыҡлағанға тиклем халҡыбыҙҙың сая тарихына күҙ һалып китәйек. Остазыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең «Башҡорттар тарихы» китабында төрлө сығанаҡтарға таянып, башҡорт ҡәбиләләренең төрлө быуаттарҙа Евразияның бик ҙур майҙанында йәшәгәнлектәре хаҡында бәйән итә.

Атай-олатайҙарҙың риүәйәттәренән миңә билдәлеләр түбәндәгесә: табындар ундан артыҡ ырыуҙы берләштереп, икенсе мең йыллыҡтың башынан уҡ, бәлки, үткән мең йыллыҡта ла, Урал тауҙары, Арал, Балхаш күлдәре, ә көнсығышта Алтай тауҙары, Байкүл, хәҙерге Байкал күлдәре араһында төрлө төрки ҡәбиләләр менән аралашып, был ерҙәрҙе үҙ итеп йәшәгән. Һуңғараҡ осорҙа төрки телен, йолаларын ҡабул итеп, ҡайһы бер мағул ырыуҙары ла табындарға ҡушыла. Әммә был ҡушылыу Сыңғыҙхандың атаһы Есеүкәйҙең төрки һәм мағул ҡәбиләләрен берләштереү өсөн алып барған һуғыштарынан байтаҡ алда була, күрәһең. Сөнки Сыңғыҙхан 40-тан ашыу төрки һәм мағул ҡәбиләләренең башлыҡтары, олуғ аҡһаҡалдары, йырсылары, батырҙары, сәсәндәре йыйынында ҡаған тип иғлан ителә. Уны уҡалы аҡ кейеҙгә ултыртып, баш осона күтәреп, йыйын уртаһына ҡуялар. Ҡырҡ ырыу башын ҡырҡ тапҡыр күтәреп төшөрәләр. Ҡырҡ ҡәбиләнең ҡырҡ аты ҡырҡ саҡырымға бәйгелә ярыша. Ҡырҡ ҡәбиләнең ҡырҡ көрәшсеһе көс һынаша. Ҡырҡ йылҡы һуйыла... Әгәр һәр йылҡынан уртаса 180 килограмм ит сыҡһа, бөтәһе 7200 килограмм ит була. Эс-ҡарынһыҙ ғына... Һәр кеше ярты килограмм ит ашаһа, был йыйында 4800—5000 кеше ҡатнашҡан тип фараз итәбеҙ. Һис шикһеҙ, барындар был йыйында булған, тип уйларға кәрәк, сөнки былдай иҫтәлек беҙгә килеп етмәҫ ине. Есеүкәй йәш сағында бер һуғышта төркиҙәргә әсир төшә. Ул оҙонлоғо ун ҡуһай, тәрәнлеге өс ҡуһайлыҡ ер зинданда ултыра. Уны ҡыр аты — тарпандың ҡойроғона бәйләп ебәрергә кәрәк ителә. Әммә ул ҡәбилә башлығынан һорай: «...Эй олуғтан олуғым! Мин уға атланайым, йығылмаһам, ярлыҡарһың, йығылһам, ҡойроғона ятырмын», — ти. Ҡыр атын тотоп килтерәләр, Есеүкәйҙең ҡулынан ҡыл арҡанды сисәләр. Ул тарпанға һикереп менә. Тарпан үрле-ҡырлы һикерә. Дала буйлап елә... Йығылмай. Төмән башы уға ғүмер бүләк итә, был ҡаһарманлығы өсөн Олон исемле ҡыҙ бирә. Ул — Сыңғыҙхандың буласаҡ инәһе. Бына шул төрки төмән башлығының исемен бирә лә инде Есеүкәй улына — Тимучин. Тимучин һүҙенең

боронғо мәғәнәһе ҡаты тимергә тап килә. 1206 йылда Тимучин ҡаған булғас, уға төркиҙәр Сыңғыҙ тип исем бирә. Мәғәнәһе — еңелмәҫ, һәр саҡ еңеүсе! Шул осорҙан алып Алтай тауҙарынан Уралға еткән, уны төп ил иткән барын-табындар, иҫке илен, «Иҫке Урал»ын — Алтайҙы һағыныбыраҡ йырламанымы икән? Быуаттар үтеү менән уның һүҙҙәре лә үҙгәргәндер, күберәк көнкүреш, тәбиғәт хозурлығын маҡтау ауаздары беҙҙең көндәргә килеп еткәндер.

Был йырҙы тик барын-табындар, ҡара-табындар ғына йырлай, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Бөрйән, Түңгәүер, Юрматы ырыуҙары халҡы белмәй ине. Сәнғәт белгестәренә, тарихсыларға был йырҙы тәүләп мин ишеттерҙем тиһәм дә хата булмаҫ. Минән һуң, оло сәхнәләрҙән, телевидениенан Барын-Табын ҡыҙҙары Флүрә Килдейәрова, Фәрзәнә Фәткуллина, Әлфиә Усманова, Зыяфат апай Әхмәтшина йырланы. Әйткәндәй, «Иҫке Урал»ды тиләү-табындар ҙа, күбәләк-табындар ҙа йырламай.

Үрҙә иҫкә алғандарға кире ҡайтып, шуны өҫтәмәксемен. Тимучин тигән исемдең тағы ла бер мәғәнәһе бар. Ул ысын тимерҙе — сын тимерҙе лә аңлата. Беҙҙең Барын-Табын ырыуына ҡараған Туңғатар олоҫо ауылдарында Сынтимер исемле егеттәр буй еткерҙе һәм еткерә. Башҡа ырыу вәкилдәрендә был исем һирәк. Тимучин — Тимерсын — Сынтимер исемдәре айҡаш ҡына.

Исемдәрҙең яңғырашы ла мең йыллыҡтарҙың баҫымы арҡаһындалыр. Быуаттар һәр нәмәне үҙгәртә: үҫемлектәрҙе лә, хайуандарҙы ла, кешеләрҙе лә һәм уларҙың телдәрен дә... *Олон* һүҙе лә беҙҙең ырыу халҡы телендә ҙур мәғәнәгә эйә: ергә йығылтмай тотоп тороусыны, үҙәкте аңлата. Мағул телендә *онон* һүҙе булһа ла, *олон* һүҙе юҡ. Тимәк, Сыңғыҙхандың инәһе башҡорт булып формалаша килгән төрки ҡәбиләһе ҡыҙы! *Урал* һүҙе лә бит башҡорт һүҙенән алынған. Ул һүҙҙең мәғәнәһе уралып ятҡан үр-тау булып бер ырыу телендә аңлашылһа, икенсе ырыу телендә — һоҡланыу ауазы! Боронғо ваҡытта бер нәмәгә бик һоҡланһалар, йә дәртләндерер булһалар «бик Урал» тигәндәр. Тимәк, ул һүҙҙең мәғәнәһе *бөйөк* (великий), *ҡеүәтле* (могучий) мәғәнәһенә тигеҙ. «Иҫке Урал» йырының әле билдәле һүҙҙәренән башҡа, түбәндәге һүҙҙәре лә бар. Быны миңә инәйем Хәтимә Сәлимгәрәй ҡыҙы Ҡорамшина-Ильясова (1913 йылғы) үҙ ҡулдары менән яҙып ҡалдырҙы:

Урал ғына тауҙың бейеге,
Бейегендә уйнай кейеге.
Мәҙкүр тауға менеп бер йырлаһаң,
Шунда ҡалыр күңел көйөгө.

Урал ғына тауҙың көн битендә
Ҡурай уйнап ята бер егет.
Ай-һай ҙа ғына тейеп көйләп ҡуя,
Яңғырай ҙа... Урал хозур бит.

Урал ғына тауҙың көн битендә
Һауаларҙа болот уҡмаша.
Һәр бер төрлө әлүән емеше күп,
Ашаниһәң тештәр ҡамаша.

Урал ғына Урал, тип әйтәгеҙ,
Урал тауы ҡыҙырым сауҡа икән.
Сауҡалығы буйлап йөрөниһәң,
Күңелдәргә бигерәк зауҡы икән.

Урал тауы кеүек, эй, тау ҡайҙа,
Урал һыуы кеүек һыу ҡайҙа?
Урал һыуҡайҙарын эстениһәң,
Янған йөрәктәргә шул файҙа.

## «Малбай»

Был йырҙың һүҙҙәре филология фәндәре докторы Ә.И.Харисов тарафынан яҙып алынған, әммә ул ике куплеттан тороп, Талҡала тураһындағы куплет юҡ. Йыр СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан 1954 йылда сығарылған «Башҡорт халыҡ ижады» китабында бирелгән. Йырҙың тулы булмаған һүҙҙәре булһа ла, моңон сәнғәт әһелдәре генә түгел, урындағы халыҡ та онотоп бөтөп бара ине. Минең иҫләүемсә, беҙҙең тирәлә был йырҙы тик Һөләймән ауылында (Учалы районы) йәшәүсе Хәнифә әбей Яруллина-Латипова (1905 йылғы) мәжлестәрҙә йырлай ине. Инәһенән улы Таһир Латипов отоп алып, «Малбай» йырын миңә 1966 йылда өйрәтте һәм тарихын һөйләне.

Учалы районы Ҡужай ауылында Һағынбай исемле һунарсының ике ҡатынынан ике улы була. Оло ҡатынынан Малбай, ә кесе ҡатынынан Ғафар тыуа. Малбай ҡустыһы Ғафар менән бермә-бер, бик татыу булып, һәр саҡ ҡурсалашып үҫә. Һунарҙа — айырылмаҫ дуҫтар, өйҙә — туғандар... Һағынбай ҡарт Барын ырыуынан ер һорап килеп ултырған Тау Ҡыуаҡаны ырыуынан Йәмилә исемле ҡыҙҙы Малбайға йәрәшеп, кәләш итеп алып бирә. Бәпәнә абыҙ яуында Малбай урыҫ баҫҡынсыларына ҡаршы бик сая һуғыша. Һуңғараҡ уны ҡулға алып, Талҡала (Үрге Урал, Верхнеуральск) ҡәлғәһенә төрмәгә ябалар. Урыҫтар башҡорттарға ҡаршы ҡаҙаҡтарҙы ҡоторта. Ҡаҙаҡтар башҡорт йәйләүҙәренә, ауылдарына барымта артынан барымта ойоштора. Талҡала ҡәлғәһендә ултырған тотҡондарға кейем-һалым, аҙыҡ-түлек бирҙерәләр, имеш, тигән хәбәр килә. Һағынбай ҡарт менән Йәмилә юлға сыға. Юлда баҫҡынсы ҡаҙаҡтар һөжүм итеп, Йәмиләне алып каса. Һағынбай Талҡалаға етеп, бер танышы менән Малбайҙы ҡасырыу тураһында һөйләшә. Әммә ҙур биремтә кәрәк була. Бер ус алтын һәм бик яҡшы менге ат һорайҙар. Тау ҡыуаҡандарҙың Кинйәкәй ауылын яндырып, урынына Вознесенск тигән ауыл һалалар. Шунда йәшәгән урыҫ байының бик йөрөк аты була. Ат таш һарайҙа тора. Ишеге алдында ике-өс туп ҡаҙ тота. Эстәрәк — бәйле эт. Ишеккә яҡын барырлыҡ түгел, ҡаҙҙар шаулаша. Һағынбай ҡарттың кесе улы Ғафар дуҫтары менән күк атты оҙаҡ һағалай. Байтаҡ көндәр үтә. Ямғырлы, ҡараңғы бер төндә килеп егеттәр таш һарай башына менә. Эттең сынйыры юғары бәйләнгән була. Сынйырҙы өҫтән әләктереп алып этте аҫып ҡуялар. Унан таш һарайҙың артын

ҡутарып, атты алып сығалар. Талҡалаға барып биремтәне тапшыралар. Малбай ҡаса. Уны эҙләйҙәр. Ул Боғанаҡ күленең ҡамышы араһында кәмәлә йәшенеп ята. Ғафар һәм дуҫтары уға аҙыҡ ташый. Йәмиләне ҡотҡарырға ҡаҙаҡтарға барымта ойошторалар. Уны алырға килгәндәрен белгәс, ҡаҙаҡтар шарт ҡуя: «Батырға — батыр. Алыштанмы? Көрәштәнме?» «Алыш икән — алыш! Көрәш икән — көрәш!» ти Малбай. Алыш та, көрәш тә, тигән ҡарарға киләләр. Әммә ҡаҙаҡта ҡылыс, ә Малбайҙа хәнйәр генә була. Бер-береһен самалап өйөрөлөп йөрөгән саҡта Малбай бер ус ҡом һоҫоп алып ҡаҙаҡтың күҙенә һибә һәм шуның менән файҙаланып, уны ергә бәрә, ҡоралын тартып алып боғаҙына һала. Ҡаҙаҡ инәлә, үлтермәүен үтенә. Йәмиләне кире ҡайтарып бирә. Шул ваҡиғалар сағыла Малбай йырында:

Ҡиблаларҙан иҫкән һыҙма елгә
Шау-шоу итә Боғанаҡ ҡамышы.
Төн уртаһы еткәс берәү йырлай —
Миҫеле Малбай ағай тауышы.

Талҡаланың ере уяҙ-уяҙ,
Һис бер сығып булмай ҡалҡыуға.
Был ни ғәжәп булды, был ни хикмәт —
Һис бер сәбәп юҡсы сығыуға.

Ялан ғына ерҙә, эй, аҡтамыр,
Аҡтамыр ҙа ерҙә мал ятыр.
Малбай менән ҡаҙаҡ алышҡан ерҙә
Күк үләндәр үҫмәй ҡаҡ ятыр.

***

Барын-Табын, Ҡара-Табын ырыуы йырсылары сығарған йырҙар шаҡтай үҙенсәлекле. Уларҙа — айырым моң, айырым аһәң. Әле йыр-моң һөйөүселәр өсөн байтаҡ йырҙарҙың ерлеге билдәһеҙ. Һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙҙың ысын тарихын яҙыу, уны тергеҙеү ярайһы уҡ ҡолас алды. Һәр беребеҙ халҡыбыҙҙың бер генә тарихи ваҡиғаһын, йыр-моңон тергеҙһәк, киләсәктә ул тулыланасаҡ, тамсынан күл, унан даръя хасил буласаҡ. Бына шул хәҡиҡәтте иҫтә тотоп, еребеҙ, халҡыбыҙ тарихының, ауыҙ-тел ижадының, моң даръяһының бөтөнләй онотолоп, юғалыуға дусар булған бер өлөшөн рухи донъябыҙға ҡайтарып бирә алһам, иманым камил булыр ине.

Барын-Табын, Ҡара-Табын ырыуҙары тарафынан төрлө быуаттарҙа ижад ителгән йырҙар араһында, билдәле шәхестәргә арнап сығарылған йырҙарҙан башҡа, үткән һәм үтеп барыусы ғүмер, донъя-әхүәл, ерһыу, мөхәббәт, ҡатын-ҡыҙ матурлығы, нескәлеге, гүзәллеге һәм нәзәкәтлеге тураһында сығарылған йырҙар ҙа байтаҡ. Бындай йырҙарға «Зарыҡай», «Йомағол», «Томан», «Кәкүккәй», «Ғүмер» йәки «Бойҙай», «Ғәйнифәрхәт», «Йәмәлекәй», «Көйөлдө» йырҙары инә. Киләсәк быуын өсөн юғалмаһын тип был йырҙарҙың мин ҡасандыр ололарҙан яҙып йәки отоп алған һүҙҙәрен тулыһынса яҙам.

## Зарыҡай

Бай ҡыҙҙары кеүек түшен киреп,
Яйыҡҡай һыуы аға яй ғына.
Был донъяҡайҙарҙың рәхәтлеген
Түрә менән белә бай ғына.

Менгән генә атым елеп бара
Ер бауырҙан осҡан ҡош кеүек.
Йәш ғүмеркәйҙәрем үтеп бара
Әкрен генә иҫкән ел кеүек.

Көмөш һалған йүгән килешәлер,
Менгән генә атың кир булһа.
Ир-егеткәйҙәрҙең ҡәҙере була,
Йәки түрә, йәки бай булһа.

Бейек кенә ағас баштарына
Менеп булмай кирәм булмаһа.
Яңғыҙ ғына егет ниҙәр эшләр
Дуҫ-иштәрҙән ярҙам булмаһа.

## «Кәкүккәй»

Был йыр ғәмәлдә телевидение, радио аша 1980 йылдарҙан һуң ғына ишетелә башланы. Республика кимәленә сығарыу ниәтендә мин уны «Хазина» ижад берекмәһе төшөргән «Барын-Табын моңдары» исемле фильмда йырланым. Унан һуң йыр Өфө дәүләт сәнғәт институты, Башҡорт дәүләт филармонияһының концерт залдарында яңғыраны. Минән һуң уны Зыяфат Әхмәтшина (Мейәс ҡалаһы) «Аршын уҡа» тип йырлай башланы.

«Хазина» ижад берекмәһендә сығыш яһаған таланттарҙың йыйылма концертын Башҡорт дәүләт филармонияһы залында күрһәтергә булдылар. Йырсылар Фәрзәнә Фәтҡуллина, Абдулла Солтанов, Зыяфат Әхмәтшина ла саҡырылғайны. Шунда мин был йырҙың исеме «Аршын уҡа» түгел, ә «Кәкүккәй» икәнен апайға төшөндөргәс, ул: «Белмәгәс ней, исемен «Аршын уҡа» тинем дә ҡуйҙым», — тине. Йыр моңло. Еңгәһенә мөхәббәт тотҡан егеттең уй-кисерештәре нескә, саф.

«Кәкүккәй» йырын мин 1955 йылда Учалы районы Һөләймән ауылында бөгөн дә йәшәп ятҡан Латипов Мөхәммәт Шәрип улынан ишеттем. Ул Әүеш (Иҫке Байрамғол) ауылынан Әлфиә исемле матур апай менән дуҫлаша ине. Әүеш ауылы Һөләймәндән 14—15 саҡырым самаһы, Һөләймән ауылы егеттәре ҡыҙ күҙләргә Әүешкә, Мулдаҡайға йөрөй.

Йәйге кис. Беҙ, 12—13 йәшлек малайҙар, Мейәс йылғаһы ҡамышлығында ҡыл һиртмәк менән суртан тотабыҙ. Яр аҫты тигән ташлы текә ерҙә өс ағай велосипедтарын ҡайынға һөйәне лә, бик оҙаҡ һөйләште. Нимәлер бүлешә алмайҙар. Икеһе ауылға китте. Мөхәммәт ағай таш

өҫтөндә оҙаҡ ултырҙы. Киске ел тирбәлтеп кенә уның тауышын еткерә. Осона аҡ ҡылдан үреп бәйләгән һиртмәк һырғыйын тотҡанмын да ҡатҡанмын...

Аршын да аршын, эй, аҡ уҡа
Аҡбуҙ атҡайыма дилбегә.
Килһәнә лә, еңгә, бер үбәйем,
Үпкән ерем ҡалһын билгегә, —

тип бик матур итеп йырлай Мөхәммәт ағай. Беҙ уға ҡамасауламаныҡ, ул тирәнән тиҙерәк шылдыҡ. Уның йыры күңелемә мәңгелеккә уйылды.

1968 йылда Мәскәүҙән каникулға ҡайтҡас, Һөләймән ауылында Таһир Талха улы Латиповтарҙа ағайым Диас Мөжәүир улы Ильясов менән мәжлестә булырға тура килде. Ҡушлап йырланылар:

Әпирһәнә, еңгә, ҡурайымды,
Мин «Кәкүккәй» көйөн тартайым.
Ебәрһәнә, еңгә, беләгемде,
Йылға буйлап йүгереп ҡайтайым.

Бикәләрҙә үҫкән ҡыр йыуаһын
Ҡырҡып һалдым бешкән ашыма.
Йөрәккәйем ялҡын, үҙем һалҡын,
Ней булды икән ғәзиз башыма.

Күңелем был йырҙы моңһоу, бик тә изге ҡомартҡы итеп ҡабул итте. Көйөн дә, һүҙҙәрен дә отоп алдым.

Таһир ағайҙың инәһе Хәнифә әбей ул саҡта тере ине әле. Мин әбейҙән йырҙың тарихын һораным.

Борон Бикәләрҙең көн битендә Күңгерәү тигән ауылда иркен ерҙәр тотҡан Байһары исемле бай йәшәгән. Уның өс ҡыҙы, ике улы булған. Оло улы буй еткәс, атаһы Ҡараһыу яғынан уға кәләш йәрәшеп алып бирә. Йәш килен ауырға ҡалып, бала күрәм тигәндә донъя ҡуя. Бай улына тағы ла кәләш алып бирә. Ике ырыу араһында ҡот сабалар. Егеттең ҡустыһы Ҡолһары ҡот сабыуҙа йөрөк ҡолаһы менән ал бирмәй. Ҡаймаҡҡа ҡайын еләге һалып тултырылған туҙ туйысты атаһының өйөнөң мөйөшөнә килтереп һуға.

Йәш килен ҡайны йортона төшөп күп тә тормай, ире яуға китеп үлеп ҡала. Ҡолһары менән еңгәһе Гөлсәсәк бер йәштә була. Торабара Гөлсәсәк ҡәйнешенә ғашиҡ була, әммә Ҡолһары атаһынан ҡурҡа, әлегә уның бер ниндәй ҙә ҡарары булмай. Ҡалымын кире алып, киленен атаһы йортона ҡайтарып ебәрергә лә уйлай Байһары бай. Әммә ҡатыны:

— Килен буйға үткәнгә оҡшай, бала булһа, үҙебеҙҙең ҡан бит, ашыҡма, атаһы... Ҡолһары ла буй еткергән, — ти.

Ҡолһары менән Гөлсәсәк Кәкүк түбәһе тигән ерҙә төндә генә осрашҡан. Ҡолһары йырсы ла, ҡурайсы ла егет булған.

Еңгәһе Ҡолһарыға:

Күңгерәү күлдә үрҙәк, эй, йөҙөрмө,
Күл ҡамышҡайҙарын өҙөрмө?

Егет кенә кеше ғашиҡ булғас,
Бер үпмәйсә ҡайтып китерме?

Саҡырып та торған кәкүккәйҙе
Осормаҫ та инем күрһәм дә.
Ҡосағыма кереп йәрем булһаң,
Үкенмәҫ тә инем үлһәм дә, —

тип йырлаған.

Ҡолһары:

Алып бирсе, еңгә, ҡурайымды,
Мин «Кәкүккәй» көйөн тартайым.
Ебәрһәнә, еңгә, беләккәйемде
Йылға буйлап йүгереп ҡайтайым.

Аршын да аршын, эй, аҡ уҡа
Аҡбуҙ атҡайыма дилбегә.
Килһәнә лә, еңгә, бер үбәйем,
Үпкән ерем ҡалһын билгегә, —

тип яуаплаған, ти. Уларҙың теләктәре бойомға ашып, Ишбулат, Ишбулды, Ишкилде, Ишбирҙе исемле ҡрағастай улдар үҫтергәндәр, ти.

Йырҙың һүҙҙәрен иғтибар менән уҡығас, тертләп киттем. Бында бит бик оло тарих ята. «Бикәләрҙә үҫкән ҡыр йыуаһын...» Бикәләр бит — беҙҙең Учалы районы менән хәҙерге Силәбе өлкәһенең сиктәре буйлап, Шәүкәнде тауынан алып, Мейәскә тиклем һуҙылған эреле-ваҡлы сауҡалар, түбәләр, тауҙар теҙмәһе. Уны Бурай тигән урман япҡан. Бикәләрҙең көнсығыш итәгендә Күңгерәү күле һәм ауылы бар, урыҫтар уны казактар станицаһына әүерелдереп, Кундравы тип йөрөтә. Хәҙерге Силәбе өлкәһенең был ерҙәре беҙҙең Барын-Табын ырыуы халҡының аҫаба ере булған.

Яҙмамдың шул тирәһенә еткәс, күңел ниндәйҙер дөрөҫлөк-дәлил талап иткәндәй булды. Миндә булған ҡулдан күсереп яҙылған Ҡорама, Муйнаҡ, Ҡужай шәжәрәләрен ҡарай башланым. Айшан менән Тайшан... Туҡта. Барындарҙы мағулға яҡын сығышлы, тип раҫлай тарихсылар. Ырыу шәжәрәһе Айшан менән Тайшандан башлана. Боронғо Табын ырыуҙарын Айшан һәм Тайшан да етәкләгән бит. Тайшанов тигән Барын-Табын ырыуы егеттәре Петр I һуғыштарында, Пугачев-Салауат ихтилалында ҡатнашҡан. Беҙҙә бит, башҡортта, фамилиялар ырыу башын башлаған олатай исеме менән йөрөтөлә. Был күҙлектән ҡарағанда, Тайшан да, Айшан да кеше исемдәре.

«Кәкүккәй» йыры тарихына кире ҡайтайыҡ. Ҡорама түбәһе һәм Ҡарабалыҡ аймағы шәжәрәләренең икеһендә лә Байһары менән Ҡолһары бар. Ҡорама түбәһе шәжәрәһендә Байһары менән Ҡолһары бер туғандар, аталарының исеме — Ҡайын. Ә Ҡайын Тайшандың улы итеп күрһәтелә. Ә артабан Байһарының балалары яҙылмай, тимәк, ул икенсе линиялы икенсе ҡан һыҙығынан.

Ҡолһарының Ҡорама ауылына ҡараған ҡан һыҙмаһы-линияһы яҙыла һәм ул бөгөнгө кешеләргә килеп тоташа. Минең ҡулда Ҡарабалыҡ

аймағының Шәйхетдин олатай Камалов, улы Харис, уның улы Марс Камаловтан алған шәжәрә күсермәһе лә бар. Был шәжәрә «Кәкүккәй» йырының тарихына бермә-бер тура килә кеүек, хатта Хәнифә әбей һөйләгән йыр легендалары ла. Беренсенән, Һөләймән, Һөйөндөк — күрше ауылдар. Икенсенән, йырҙа әйтелгән ерҙәргә терәлеп яталар. Өсөнсөнән, ул ерҙәр һаман да йырҙа әйтелгән исемдәр менән йөрөтөлә. Тик Кәкүк түбәһен табаһы ине. Бәлки, ул йәйләүҙә, элек тирмәләр ултырған ерҙәлер?

Ҡулкүсермә шәжәрәлә иң мөһиме шуныһы: Байһарының улы Ҡолһары, уның улы Ишбулды, уның улы Вәкит, уның улы Йәғәфәр... Ә легенданан күренеүенсә, Ҡолһары менән Гөлсәсәк (уны Сәсәк тип кенә йөрөткәндәр) ҡауышҡас, уларҙан Ишбулат, Ишбулды, Ишкилде, Ишбирҙе исемле улдар тыуып утыға. Шәжәрәлә Ҡолһарының тик Ишбулды улы ғына теркәлгән. Тимәк, ул Ҡолһарының иң ныҡ тамыр тараткан улы булған. Ҡулъяҙма шәжәрәнән күренеүенсә, бөгөнгө көндәге кешеләрҙән алып Байһарыға тиклем — ун быуын. Әгәр һәр быуындың уртаса йәшен (32 йәш) алһаҡ, 320 йыл. Тимәк, Байһары 1680—1681 йылдарҙа тыуған. Уға 20—23 йәштәрҙә Ҡолһары тыуған булһа, уның 20 йәше 1720 йылдарға тура килә. 1735—1740 йылдарҙа уның оло улы буй еткереп, шул йылдарҙағы һуғыштарҙа үлеүе риүәйәттә сағылалыр. Риүәйәт менән тарихи ваҡиғалар бер-береһен раҫлаған кеүек.

### «Шәрәфетдин»

Был йыр Мейәс йылғаһы буйында ултырған Ялтыр ауылынан (хәҙерге Арғаяш районы Силәбе өлкәһе) Ҡара-Табын ырыуы кешеһе Шәрәфетдин Вәсилевҡа арнап сығарылған. Ауыл 9-сы кантонға ҡараған.

Мылтығымды алып мин йүгерҙем
Мейәс кенә буйы туғайға.
Иҫән генә йөрөп, һауҙар ҡайтһам,
Эштәр китер ине уңайға.

Мейәс кенә буйы ҡара тал,
Юнып ҡына ҡуйған кеүек.
Уйлаған да уйым, ай, юҡ кеүек,
Эскенәйем яна ут кеүек.

Мейәс кенә буйлап йөрөгәнемдә
Тотоп алып мендем бер ҡашҡа.
Уңлап ҡына һуллап ҡашым тарта,
Ниҙәр булыр икән был башҡа.

Йырҙы 1939 йылда Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында Төхвәт Моратовтан яҙыусы Ғәйнан Әмири яҙып алған. Был һәм башҡа миҫалдарҙан сығып, шуны әйтеү кәрәктер: ҡайҙа яҙып алыныуына ҡарамаҫтан, йырҙарҙың тыуған төбәге бар. Быға бәхәс ҡороу кәрәкмәй, уларҙы һаҡлау һәм халыҡ араһына таратыу зарур!

## «Бойҙай» («Ғүмер»)

Был йыр ҙа Барын-Табын, Ҡара-Табын ырыуы ерлегендә ижад ителгән. Уны хәҙерге ваҡытта тик Әүеш, Ҡужай, Шәрип, Балбыҡ, Мулдаҡай ауылдарында ғына йырлайҙар. Йыр талғын һәм зарлы.

Һибәләп кенә һибәләп ямғыр яуа
Бәләкәй генә түбә тирәләп.
Ағай-энеләрем иçемә төшһә,
Ултырып-ултырып китәм сүгәләп.

Һибәләп кенә һибәләп ямғыр яуа
Кәртәләп тә ҡуйған бойҙайға.
Ҡайҙа ғына барһам, юлым уңмай,
Тел тейҙерҙем микән Хоҙайға?

Ойоҡһотоп ҡына ҡарҙар яуа
Ҡалҡыу булып ятҡан Дүнәйгә.
Ярҙам итсе, Тәңрем, ризыҡ бирсе,
Саҙаҡаһын бирәм Хоҙайға.

Был йырҙы мин 1972 йылда Әүеш ауылында Сарим Ҡорбан улы Усмановтан ишеттем һәм яҙып алдым. Унан башҡа кешенән ишеткәнем булманы. Ул ағай 1937 йылғы ине. Дүнәй тауы иһә Әүеш менән Нәрәле ауылы араһында, Алакүл буйында ҡалҡып тора.

## «Йомағол»

Был йырҙы 1965 йылдың март айында Учалы районы Тәтлембәт (Ҡансыра) ауылында ҡурайсы, йырсы Ғәйнуллин Сафиулла бабайҙан яҙып алдым. Ул саҡта уға 65—70 йәштәр самаһы ине.

Тарихын да һөйләне. Ҡужай ауылынан Йомағол исемле егет оҙайға һалдатҡа алына. Ул һалдатҡа китер алдынан ғына Балбыҡ ауылының Таңһылыу исемле һылыуына өйләнгән була. Йомағол оҙаҡ ҡайтмағас, Таңһылыуҙың атаһы уны үҙ йортона, Балбыҡҡа алып ҡайта. Оҙон ҡыш үтә. Яҙ миҙгеле килгәс, Йомағол ҡайтып төшә. Таңһылыу өйҙә булмай. Төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Йомағол ҡайны йортона бер нисә тапҡыр килһә лә, уны керетмәйҙәр.

Яҙҙың бер матур таңында Йомағол Таңһылыуҙың бүлмәһе ҡаршыһына килеп йырлай:

Һары ла ғына була һандуғас,
Ҡара ла ғына була ҡарлуғас.
Татлы йоҡоларым өскә бүлеп,
Һин тип килдем, йәнем, яҙ булғас.

Һары һандуғас балаҡайҙары
Һайрайҙыр ҙа аяҙ төндәрҙә.
Һин йәнейем иçемә төшһәң,
Иçем китә һәр бер көндәргә.

Йомағол бик һарһылып йырлағас, йоҡоһонан уянған ҡайныһы:
— Асығыҙ ишекте кейәүгә, — тип ҡысҡырып ебәрә.
Йомағол менән Таңһылыу тағы ла ҡауыша.
Был йырҙы Ялсығол ауылынан Ишкенә ағай Батыршин бөгөн дә йырлай. Моңон юғалтмаһаҡ ине. Сәнғәт белгестәре уны Ишкенә ағайға барып яҙып алырға бурыслы.

## «Ғәйнифәрхәт»

Шул уҡ мөхәббәт темаһына арналған, әммә инде моңо бер кем тарафынан да отоп алынмаған, тик өҙөк-һурыҡ ҡына һүҙҙәре ҡалған йыр ул.
Был йырҙы мин бала саҡта атайым Мөжәүир Ильясов үҙ алдына ғына йырлай ине. Бәләкәйерәк булғанғалыр, көйөн отоп ала алмай ҡалдым. Беҙ үҫә төшкәс, был йырҙы ул беҙҙең алда йырламаҫ булды. Тик:

Бер битең ай һинең,
Бер битең нурлы көн.
Ҡайһы битен һурып та,
Ғәйнифәрхәт, үбәйем, —

тигән һүҙҙәре иҫтә ҡалған.
1999 йылдың 1 май көнө Мулдаҡай ауылында Моталлов Хәйерүәрә ағай менән ултырҙаш булырға тура килде. Ярайһы булып алғас, Хәйерүәрә ағай:

Берәүкәйе һары, берәүкәйе ҡара,
Берәүкәйен алып та, Ғәйнифәрхәт, һатығыҙ.
Берәүкәйе еңгә, берәүкәйе ҡыҙ ҙа,
Уртағыҙға алып та, Ғәйнифәрхәт, ятығыҙ, —

тип йырлап ебәрҙе. Үкенес. Инде ағай мәрхүм. Йырҙың көйөн отоп та, яҙып та алып ҡалып булманы. Шулай ҙа «Ғәйнифәрхәт»тең 1976 йылда Һөйөндөк ауылында Бикбулатова-Баязитова Менәүәрә апайҙан (1914 йылғы) яҙып алған бер варианты һаҡланған булып сыҡты:

Һинең менән бергә,
Тыуған үҫкән ерҙә
Үтһен ине ҡыуанып,
Ғәйнифәрхәт, ғүмерем.

Бер йылмайып көлһәң,
Яратамын, тиһәң,
Янмаҫ ине ялҡында,
Ғәйнифәрхәт, күңелем.

Иркәләмәй, харап,
Йылмайһаңсы ҡарап.
Нисек инде килеп тә,
Ғәйнифәрхәт, түҙәйем.

Бер битең ай һинең,
Бер битең нурлы көн.
Алмаш-тилмәш уларҙы,
Ғәйнифәрхәт, үбәйем.

Көйөн белеүселәр, иҫләүселәр булһа, киләсәк быуын мең рәхмәтле булыр ине...

## «Саңлы үҙәк»

Беҙҙең Учалы районында көнсығыш табындарҙың дүрт ырыуы йәшәй. Иң төньяғында һәм урта өлөшөндә (Ҡоҙаш, Ташкисеү, Рәсүл, Сорағол, Ҡотой, Ҡолош) — ҡара-табындар, уларҙан бирерәк, типтәр-табындарға тиклем барын-табындар, унан тиләү-табындар һәм иң көньяғында күбәләк-табындар йәшәй.

Бына шул күбәләк-табындар ерлегендә сыҡҡан «Саңлы үҙәк»тең икенсе бер варианты барлығын, бәлки, күптәр белмәйҙер.

1966 йылда миңә (киләсәктә ауыл хужалығы белгесе булараҡ) Байрамғол совхозының Оҙонкүл бүлексәһендә йәйен практика үтергә тура килде. Көркәк тауының көнитәгендә ине йәйләү. Золомлоҡ фажиғәһе осоронда ҡулға алынып, Рәсәй зиндандарын үтеп сыҡҡан, әммә рухы һынмаған көтөүсе ағай бар ине. Төп сығышы Оҙонкүл ауылы булып, шунда ғүмер кисерә ине. Исемен дә, фамилияһын да онотҡанмын. Төндә мин уның янына һыбай килдем. Малдар таралып ашай. Ай яҡтыһы. Уға етмәйенсә туҡтап, аттан төштөм. Ағай ат өҫтөндә нескә генә күтәренке тауыш менән бик һарһылып йырлай:

Саңды үҙәккәй буйы сатыр ҙа сотор,
Сатырында ятыр бер матур.
Ирендәрен үпһәң, эй, бал татыр,
Бөйөрөнә төртһәң, тик ятыр.

Моңо «Саңлы үҙәк»тән башҡа, ҡыҫҡа, еңел йырлана. Мин бер генә дүрт юллыҡты һәм йырҙың көйөн отоп ала алдым. Был да халҡыбыҙҙың байлығы.

## «Зиндан»

Барын-табындар, ҡара-табындар сығарған боронғо йырҙар араһында фажиғәле ваҡиғаларға арналған йырҙар ҙа бар. Быңдай йырҙарға «Зиндан», «Искәндәр», «Туғанай» керә.

«Зиндан» исемле йырҙы мин тәү тапҡыр 1966 йылда Ҡорама ауылы кешеһе, инәйемдең ике туған ағаһы Ғаттар Йыһангир улы Ҡорамшиндан ишеттем, һүҙҙәрен яҙып алдым, көйөн өйрәндем. Белмәгән кешеләр уның исемен «Ҡамсым һабы» тип тә әйтә.

Ҡамсым һабы биҙәр-биҙәр,
Ун икенән һалып үргәнгә лә,
Ун икенән һалып үргәнгә.

Ауырыу түгел, үҙем шулай,
Ай-һай ҙа минең ғәзиз башым
Бик күп ҡайғы-хәсрәт күргәнгә.

Ун һигеҙ ҙә йәштән оҙаттылар
Башым бороп япҡан төрмәгә лә,
Башым бороп япҡан төрмәгә.

Бер аҙҙан һуң сығарҙылар,
Ай-һай ҙа минең ғәзиз башым
Оҙатабыҙ тейеп Пиремгә.

Йүгереп мендем, эй, ҡалҡыуға,
Ултырҙым да сауыл һалҡынға.
Ултырған ерем көйөп китте,
Ай-һай ҙа минең ғәзиз башым,
Эскенәмдән сыҡҡан ялҡынға.

Ултырҙым да сауыл, эй, төбөнә,
Ҡойола ла һары яфыраҡ.
Сит ерҙәргә китеп ҡайта алманым,
Ай-һай ҙа минең ғәзиз башым,
Шунда яҙған икән туфыраҡ.

Ерәнсәй ҙә атымда көмөш эйәр,
Бәшәр өҙәңгеһе өҙ генә.
Үҙ башыңды үҙең аямаһаң,
Ай-һай ҙа минең ғәзиз башым,
Әрәм булыуҙары тиҙ генә.

Был йырҙы Аҙнаш ауылы егете үҙ тормошона бағышлап йырлаған зинданда. Унан ул ҡайта алмай. Бергә ултырған дуҫ-иштәре йырҙы аманат итеп тыуған ергә алып ҡайта. Егет ун һигеҙҙә армияға алына. Был хәл 1820—1840 йылдарҙа була. Атыуҙа мәргән, атта ҡылыс менән оҫта эш итеүсе, әммә урыҫса белмәгән был баһадир егеттән әфисәр көлөп, көн һайын эшкә ҡуша икән. Бер көндө ул ашханаға йөҙ күнәк һыу килтергән. Әфисәр һаман да һыу ташырға бойорғас, егет һыулы күнәген уның башына ҡаплай. Әфисәр ҡынынан ҡылысын һурып ала. Әммә егет уға йоҙроғо менән тондора, бер һуғыуҙан әфисәрҙе үлтерә һуға. Шуның өсөн ул зинданға эләгә.

## «Искәндәр»

Был йырҙы мин 1966 йылдың августында Мулдаш ауылында Уразаев Хаммат бабайҙан (1904 йылғы) яҙып алдым. Ҡара-Табын ырыуынан Искәндәр Байғазин Силәбенең Ҡоншаҡ яғында ун ике мишәр ауылының әллә кантон башлығы, әллә старшинаһы булып тора. Губерна судында заседатель дә була.

Йәйҙең баш айы. Ҡуш ат егеп, Искәндәр Ырымбурға юл ала. Юлы Бөрйән ырыуы аша үтә. Бер ауылда ул байға фатирға төшә.

Иртәгәһен Искәндәр юлға сығырға ынтылһа ла, бай:

— Иртәгә йыйын, әфәндем, ҡарап кит... Байрамды ташлап китеү ярамаҫ, был ырыу кешеләрен һанға һуҡмау була, — тигән.

Ат сабышыу, һырғыйға менеү һәм башҡа уйындар бөткәс, көрәш башлана. Көрәштә ике бер туған бөрйән егеттәре барыһын да йыға. Искәндәр әйтә:

— Хужам! Әгәр рөхсәт булһа, мин дә көрәшеп ҡарайым.

— Рөхсәт!

Искәндәр бөрйән егеттәрен ташлап, йөлдәне ала. Кискеһен бай: «Ҡал, иртә менән китерһең», — тиеүенә ҡарамаҫтан, ҡабаланып юлға сыға. Байтаҡ ара барғас, Һаҡмар йылғаһы буйында йоҡларға туҡтай. Төндә уны ике кеше үлтереп китә. Бына шул ваҡиғаға арнап сығарылған был йыр. Әммә уны әллә ҡара-табындар, әллә бөрйәндәр сығарған. Шулай ҙа был йырҙы ҡара-табындар ижад иткәндер, уны беҙҙең яҡта ғына йырлайҙар. Йырҙың яҙмаһы архивтарҙа булырға тейеш, сөнки уның XIX быуатта С.Рыбаков яҙып алған варианты бар. Ә 1938 йылда Л.Лебединский Фәриҙә Биишеванан көйөн дә яҙып алған. Уразаев Хаммат бабайҙан яҙып алған һүҙҙәре түбәндәгесә:

Һаҡмар ҙа ғына йылға ташлы икән,
Искәндәр ҡәләм ҡашлы икән.
Эй, Ғәбделдең улы Искәндәр
Ун ике ауыл башы икән.

Һаҡмар ғына йылға күперен
Таш буралар менән бөтөргән.
Эй, Ғәбдел улы Искәндәрҙе
Бөрйән ғәййәрҙәре үлтергән.

Һаҡмар ҙа ғына һыуы аға икән
Уймаҡ кеүек урғылып.
Дәсидәтел Искәндәрҙең
Ҡара ҡашы тора ҡыйылып.

Ҡоросдин бысаҡ һуҡтырҙым,
Ҡарағайҙан булды күмере.
Дәсидәтел булған Искәндәрҙең
Ҡыҫҡа ғына булды ғүмере.

Бала ауһаҡтарҙың ҡабығы
Аҡ ҡуянҡайҙарҙың аҙығы.
Эй, дәсидәтел булған Искәндәрҙең
Бөрйәндәргә булһын яҙығы.

Төлкө аяҡҡайҙары бәсә тун,
Яғаһынан һелкеп кем элһен.

Эй, Искәндәрҙән ҡалған етемдәрҙең
Яуырынан тотоп кем һөйһөн?

Һаҡмар һыуҡайының күбеген
Тотоп алып, Фатима, һабын ит.
Эй, һағынырһың, Фатимам, һарғайырһың,
Хоҙай ҡушҡан эшкә сабыр ит.

С.Рыбаков дүрт кенә дүрт юллыҡ яҙып алған булған. Бында иһә — ете дүрт юллыҡ.

***

Тарихсылар, фольклорсылар алдында әле бик күп эҙләнеүҙәр һәм асыштар тора. Үрҙә яҙып киткән һәм яҙыласаҡ йырҙарыбыҙҙың ерлеге һәм тарихы барыһы ла хәҙер тик беҙҙең төбәктеке — Барын-Табындыҡы, тиеү бик үк дөрөҫ булмаҫ. Мине сығыштары менән бер аҙ икеләндергән йырҙар түбәндәгеләр: «Кәкүккәй», «Искәндәр», «Малбай», «Йәмәлекәй», «Кинйәкәй». Сөнки үрҙә әйтелгән йырҙарҙың даирәһе шаҡтай киң. Мәҫәлән, «Искәндәр» һәм «Кәкүккәй» йырын бөрйәндәр ҙә, үҫәргәндәр ҙә йырлауы ихтимал. Әммә был йырҙарҙы уларҙың береһе лә әлегә тиклем сығарманы. «Кинйәкәй» йырын Силәбе өлкәһенең Сыбаркүл, Уй, Арғаяш, Ҡоншаҡ райондарының халҡы икенсе исем менән йырлауы ла мөмкин.

## «Томан»

Башҡорт халҡының оло йырҙарының береһе — «Томан». Был йырҙы республика кимәлендә 1956 йылда Башҡорт мәҙәниәте-сәнғәте декадаһында Кәрим ауылы кешеһе Наил Бүләков Өфөлә һәм Мәскәүҙә Кремлдә йырлап ишеттергән. Унан һуң Наил ағайҙың башҡарыуында йыш ҡына Башҡортостан радиоһынан бирәләр ине. Иҫләүемсә, уға тиклем «Томан» йырын Шәрип ауылынан Сәйет Моратов, Кәрим ауылынан Кәлимулла бабай Зәйнуллин, Рәүиә апай Ғәбдинова, Ҡораманан Изахетдин Ибраһимов, Ғүмәр ағай Ҡорамшин йырлай ине.

Ғөмүмән, «Томан» йыры мәжлес һайын башҡарыла килде. «Томан» йыры ла, «Йомағол» йыры кеүек, ике йәш йөрәктең бер-береһенә булған һағыш кисереше. Учалы районы Тәтлембәт ауылы егетен егерме биш йылға бер байҙың улы урынына һалдатҡа алалар. Яңы ғына өйләнешкән ир менән ҡатындың айырылышыуы бик тә һағышлы һәм зарлы була. Ир киткән сағында йөрәк һағышын йырға һала. Йыр тиҙ генә халыҡ араһына тарала һәм, мөхәббәт үлемһеҙ булған кеүек, йыр ҙа үлемһеҙгә әүерелә:

Иртә лә томан, кис тә томан,
Был томанҡайҙарға ни булған?
Тауға ла менеп, ташҡа баҫып
Һин ҡарарһың, йәнем, мин булмам.

Бишмәтеңдә һинең биш төймә,
Шул бишмәткәйеңде күп киймә.
Кисен генә ятһаң, иртән торһаң,
Һағынырһың мине, мин булмам.

Саҡыра ла кәкүк, һайрай былбыл
Талдар араһында ҡағынып.
Ауырыу ҙа түгел, үҙем шулай,
Мин һарғайҙым һине һағынып.

Саҡыра ла кәкүк, эй саҡыра
Тауҙарҙа ла түгел, таллыҡта.
Был донъяҡайҙарҙың зауыҡлығы
Байлыҡта ла түгел, һаулыҡта.

Йырҙың һуңғы дүрт юллығынан күренеүенсә, һаулыҡ кәрәк, һау булайыҡ, һау булһаҡ, өйгә лә әйләнеп ҡайтырбыҙ, гөрләтеп тормош ҡорорбоҙ, тигән оптимистик мәғәнә һала ире ҡатынының күңеленә.

## «Азамат»мы, «Хәжирәкәй»ме?

Ҡара-табындарҙың, ҡыуаҡан-табындарҙың, барын-табындарҙың билдәле шәхестәргә арнап сығарған йырҙары халыҡ ижадында шаҡтай ҙур урын алып тора. Ләкин шуның менән бергә, уларҙың ҡайһы берҙәре республика кимәлендә күптәнән инде төрлө башҡарыусылар тарафынан йырланып килһә лә, бөгөнгө көнгә тиклем бер йырҙың көйөнә икенсе йырҙың һүҙҙәрен ҡушалар. Шундай йырҙарҙың береһе — «Азамат» йәки «Азамат кантон». Бөгөнгө көнгә тиклем Учалы районы Малай Муйнаҡ ауылы ҡыҙына арнап сығарылған «Хәжирә» («Хәжирәкәй») исемле йырҙың көйөнә «Азамат» йырының һүҙҙәрен ҡулланып йырлайҙар. Быны Барын-Табын халҡының йыр-моңға битараф булмаған барлыҡ оло кешеләре белә тиерлек, әммә республикаға киң билдәле йырсылар йырҙарҙың тарихи сығышын белмәйенсә, башҡарыусылар булып ҡына сығыш яһағас, дөрөҫлөк һаман да өҫкә сыға алмай.

Был турала мин 1967 йылдың 6 апрелендә «Совет Башҡортостаны» гәзитендә «Азамат»мы, әллә «Хәжирәкәй»ме?» тигән мәҡәлә менән сығыш яһаған инем. Үрҙә килтерелгән мәҡәләне тағы ла дөрөҫләп, шуны әйтмәксемен: кантондар идаралығы системаһы индерелгәс, кантон башлығы ҡайһы ауылдыҡы, кантон үҙәге лә шунда булған, ә Мөхәмәтйән Бүҙәкәев (4-се кантон башлығы) Учалы районы Малай Муйнаҡ ауылы кешеһе була.

«Азамат» тип сығарылған йыр хәҙерге Ҡурған өлкәһе Әлмән районы Атетәр ауылында беренсе кантон башлығы булып 1798—1820 йылдарҙа торған Иҡсан Азаматовҡа арнап сығарылған. Һүҙҙәренә ҡарағанда, Иҡсан ғүмеренең һиҙҙермәй генә үтеп барыуына бошона. Тормош һәм ғүмер иткән көндәре үҙе теләгәнсә үк үтһә лә, берҙән-бер ҡыҙы Шәрифямалдың киләсәге өсөн борсола. Йыр сығарыусылар Шәрифямалдың йәйләүҙе йәмләп ҡолон бәйләүен айырым бер тойғо менән

тасуирлай, ун һигеҙ йәштән үк яуаплы вазифала эшләгән атаһын ирҙең олтаны тип олуғлай.

Кантондар идаралығы системаһын индереү менән үк кантон башлығы була Иҡсан Азаматов. 1820—1846 йылдарҙа уны улы Шаһишәриф Азаматов алмаштыра. Шаһишәрифтән һуң Иҡсандың икенсе ҡатынынан тыуған Мирхәйҙәр Азаматов 1846—1863 йылдарҙа шул уҡ беренсе кантон башлығы була. «Мирхәй кантон» йыры ла шул Мирхәйҙәр Азаматов тураһында.

«Хәжирәкәй» йырына килгәндә, был йыр үҙенең көйө менән тап бөгөнгө «Азамат» йыры. Әммә ул һаман да бәхәсле булып килә. Бөгөнгө «Азамат» — ул, һис шикһеҙ, «Хәжирәкәй» йыры. Беҙҙең яҡтың риүәйәттәренә ҡарағанда, Хәжирә Малай Муйнаҡ ауылынан 4-се кантон башлығы Мөхәмәтйән Бүҙәкәевтың ҡыҙы була.

Мөхәмәтйән Бүҙәкәев 1793 йылда Туңғатар олоҫоноң Малай Муйнаҡ ауылында донъяға килә. Ун биш йәшенән үк хәрби хеҙмәттә. Дүртенсе кантонда — урядник. 1815 йылда — зауряд хорунжий. Әйтергә кәрәк, казактарҙың хәрби дәрәжәһе дөйөм әрме дәрәжәһенән айырыла. Казак — рядовой, урядник — унтер-офицер. Хорунжий — прапорщик-корнет. Сотник — поручик, подпоручик — ротный, есаул — капитан-ротмистр, войсковой старшина — майор, подполковник, армейский майор — полковник.

Мөхәмәтйән Бүҙәкәев 1822 йылда — йорт старшинаһы. 1831 йылда зауряд есаул һәм шул уҡ йылда ул хәҙерге Никольск ауылында (Силәбе өлкәһенең Уй районы Төхмәт ауылы) кантон башлығы Төхмәт Үтәевтә ярҙамсы булып хеҙмәт итә. 1832 йылдан шул уҡ 4-се кантонда кантон башлығы булып тәғәйенләнә. 1835 йылда ул — унтер-хорунжий. 1841 йылда — сотник. 1842—1855 йылдарҙа — войсковой старшина, унан подполковник. 1856 йылда — полковник. 1857 йылда уға генерал-майор дәрәжәһе бирелә. Ғайса Хөсәйеновтың «Ил азаматтары» китабында Мөхәмәтйән Бүҙәкәевтың Зөһрә, Орҡоя, Зөләйха исемле ҡатындары һәм Хәлиулла (1846), Ғәлиулла (1856), Гөлсәскә (1844), Латифа (1846), Ғәзизә (1851), Ғөбәйҙә (1854) исемле балалары күрһәтелә. Былар архив документтарынан алынған. Әммә был документтарҙа уның барлыҡ балалары ла күрһәтелмәй. Бында уның Омскиҙа хәрби училищела уҡыған ике игеҙәк улы һәм ҡыҙы Хәжирә яҙылмай. Был балалар, күрәһең, уның вафат булған тәүге ҡатынынан булғандыр. Ололарҙың һөйләүе буйынса, уның бер ҡыҙы Хәмиҙә 9-сы кантон башлығы Хәйеровта тормошта була, ә Хәжирәһе 1-се кантон башлығы Иҡсан Азаматовтың улы Шаһишәрифтә кейәүҙә була. Шаһишәриф Азаматов 30 йәшендә кантон башлығы итеп тәғәйенләнә. Бына шул Хәжирәнең һағынып йырлаған йыры ла инде «Хәжирәкәй».

## «Төхмәт (Төхвәт) кантон»

1798 йылда 4-се кантондың беренсе башлығы итеп йөҙбашы Ҡорама Муйнаҡов билдәләнә. Әммә писарь-яҙыусы булып хеҙмәт иткән Төхмәт Ырымбур губернаторына Ҡорама Муйнаҡов өҫтөнән «халыҡ исеменән» һәр төрлө шикәйәттәр яҙыуын туҡтатмай. Башҡорт ерҙәрен

казактарға бүлеп биреү өсөн землемерҙар килгәс, Төхмәт уларға кантон исеменән ат бирҙермәй. Ә Ҡорама Муйнаҡов урыҫса һөйләшә һәм яҙа белмәй. Төхмәт шуның менән файҙалана. Йәнәһе, кантон башы уларҙы ҡабул итмәй, ашатмай-эсермәй, хатта ер үлсәп йөрөү өсөн ат та ектермәй. Һөҙөмтәлә, землемерҙар бик күп башҡорт ерҙәрен казактарға бирә (бөгөнгө Бужын, Ҡолаҡты-Ларино, Ҡарағас күпер — Башкирское, Выдрино — Әгер һәм башҡа ерҙәр казактарға күсә). Был Ҡорама кантонға губерна башлыҡтары һәм халыҡ тарафынан ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Һөҙөмтәлә, ул кантон башлығынан алына һәм 1810 йылдар самаһында Төхмәт Үтәев кантон башлығы булып китә. Олатаһы Үтәйҙең ауылын кантон үҙәге итеп ала, һуңғараҡ был ауыл Төхмәт тип атала башлай. Төхмәт Ҡорамала сәркәтип булып торған сағында уҡ Кәрим ауылынан Ҡара-Табын ырыуы вәкиле Төпәевтарҙың ҡыҙы Ғәйшәне яратып йөрөй. Ул Ҡазан яғынан сауҙа менән килеп, башҡорт араһына һырыҡҡан Менәс исемле татарҙың ҡыҙын алған була. Ғәйшәне икенсе бисәлеккә бирмәгәндәр. Ғәйшә үҙе лә Төхмәтте яратмаған. Уны Ҡорама ауылына нигеҙ һалған Ҡорамша тигән уҡымышлы егет алған. Төхмәт быға бик ҙур үс йөрөткән, сөнки Ҡорамша элекке кантон башлығы Ҡорама Муйнаҡовтың ағай-энеһе булған. Төхмәт, кантон башлығы булып алғас, үҙен иркенерәк тота башлаған. Һый-хөрмәт, ҡунаҡ, кәйеф-сафа ҡороу уның көндәлек ҡағиҙәһе була. Йәш Ҡорамша мулланы ҡатыны Ғәйшә менән ғәйет байрамына саҡыра. Ғәйет намаҙы Төхмәт ауылында мәсеттә уҡыла. Ғәйет бөткәс, Төхмәт Ҡорамшаны мәсеттә туҡталырға һорай. Кемдеңдер үткәненә бағышлап бер-ике сүрә әйтеүен үтенә. Ҡорамша мулла уҡынып эйелгән сағында Төхмәт ҡылысы менән уның елкәһенә саба. Быны һиҙгән Ғәйшә тиҙ генә атын ектерә лә, күгеркүсере менән сабып сығып китә. Тығын йылғаһының тар кисеүендә Төхмәттең һыбайлыһы килеп етешә. Ғәйшә уға һөңгөһө менән сәнсә. Ул ярҙан һыуға ҡолай.

— Тығын, тығынып ҡат, — тип ҡысҡырған, имеш, Ғәйшә. Шунан бирле ул йылға Тығын тип атала, ти.

Төхмәт, ғөмүмән, халыҡ күңелендә иң яуыз, иң бәдбәхет кантон булып иҫтә ҡала.

Урап-урап ҡына ат сабырға
Сәңгел генә тигән ер ҡайҙа?
Ҡылыс менән сыбыҡ ҡулдарында,
Төхмәт кеүек яуыз ир ҡайҙа?

Бәләкәй генә күлдең, ай, эсенән
Күгел генә өйрәк атырмын.
Дәғүәләшмә, егет, минең менән,
Бала-сағаң менән һатырмын.

Киҫеп кенә алып ит ырғыттым
Тағараҡҡа ҡунған бөркөткә.
Төхмәт кантон эше Палатала,
Башы китһә икән Иркутҡа.

Был ваҡиғаларҙан һуң уны кантонлыҡтан төшөрәләр һәм Себергә һөргөнгә ебәрәләр, ул шунда үлеп ҡала. Үкенескә ҡаршы, Төхмәт Үтәев, Ҡотломырҙа Тәүкилев (Тәфтиләү) кеүек йәлләттәрҙең йәндәре күккә осһа ла, улар хаҡында иҫтәлек әлегә тиклем халыҡ күңелендә үлеп бөтмәй. Халыҡ уларҙы ҡәһәрләһә лә, үлтереп бөтөрмәй. Улар халыҡ хәтерендә йәлләт булып һаман йәшәп килә.

## «Кинйәкәй»

Был йырҙың тарихы мин һөйләгәндәрҙән башҡа юҫыҡта ла йөрөүе бик ихтимал. Уның бер тамырын Силәбе өлкәһе Сыбаркүл, Арғаяш райондарынан эҙләү кәрәктер, сөнки был йырҙың моңо күберәк шул яҡтан ағылды. Ҡорамшин Һарун бабайым, атайым Мөжәүир Ильясов, ауылдашым Нәғимйән Ҡәйепов (1933—1977) һөйләүҙәре һәм йырлауҙары буйынса, тарихы түбәндәгесә.

1958 йылда Ҡорама ауылынан бер төркөм ҡәрҙәштәр Уралда Нәжем, Ялпантау итәгендә бесән эшләп яттыҡ. Үҙе йырсы, үҙе сәсән-бәйетсе Кәрим Нурислам улы Сәғитов беҙҙең бригадир ине. Хәҙерге Вознесенка, ә ысынбарлығында боронғо башҡорт ауылы Кинйәкәйгә етмәҫ борон Йәнбикә исемле йылға һәм бик ҙур ялан бар. Бына шул Йәнбикә яланына килеп керҙеңме, Кәрим бабай иң алда Бәпәнә абыҙ Төрөпбирҙин, Йосоп батыр Арыҡов, Аҡкужа батыр, йөҙбашы Юлбарыҫ, Юлдаш мулла тураһында һөйләргә керешер ине. Үҙ ерен, илен һаҡлап, Рәсәй империяһының баҫыу, талау сәйәсәтенә ҡаршы башҡорттар 1735 йылда йәнә күтәрелгән. Йәнбикә яланында батша ғәскәрҙәре менән иҫ китмәле алыш булған. Ике яҡтан да ун меңдән артыҡ ҡылыс күтәрелгән. Ҡан эркелеп аҡҡан. Урыҫтар Талҡалаға ынтылған, әммә Йосоп батырҙары уларҙы кире боролорға мәжбүр иткән. 1736 йылда Йосоп батыр суҡынмыш мырҙа һатлыҡ Тәфтиләүҙе ҡыйрата. Ул да кире борола. Был һуғыш Иртәш күле аръяғында була. Нәрәле тауы ҡырлауығы Үткәүелдә лә нимес янаралы менән алышалар. Ҡара-Табын, Барын-Табын төбәгендә батша ғәскәрҙәре тарафынан бик күп ауылдар яндырыла. Бурылайғыр, Бикбау, Ҡотлоюл, Исмәғил, Үмәт, Үмәр, Тоҡай, Тойғон, Уңғар, Абдрахман, Әликәй, Тәнәкәй, Ҡолбай, Аҡкужа, Ҡандыболаҡ, Кинйәкәй, Ҡолош, Мулдаш (Өргөн күле буйы), Күскилде, Бикҡол, Һәйтембәт, Биҡсура, Ҡунай, Ҡужай... Был ауылдарҙың күбеһе юҡ, ә ҡайһы береһе икенсе урынға күсеп ултырған, байтаҡтары икенсе исем алған. Мәҫәлән, Ҡуяндар, Сәйет — Сәфәр, Ирәндек иһә Мансур булып киткән.

Урыҫ ғәскәре иң алда Ҡыуаҡан ырыуын ҡыйрата. Уларҙың Аҡташ (Веселовка), Ялауҙы, Ямаҙы, Тәтлембәт, Әүәз кеүек бик күп ауылдары нигеҙенә тиклем яндырылғас, ҡыуаҡандар Барын ырыуынан ер алып төпләнә. Иң башта улар ауылдарын боронғо исем менән йөрөтә. Нигеҙҙә барындар менән ҡыуаҡандар йә бер ауылда, йә бик йәнәш төпләнгән. Бер ауылдың ике зыяраты булған, ул әле лә ҡайһы бер ерҙә һаҡлана. Ҡәбер таштарының ҡуйылышы ла башҡасараҡ. Барындар ҡәбер ташының яҙыуын көнсығышҡа ҡаратып ҡуйһа, күршеләр уны тыштан яҙған.

1736 йылдың ҡышында Ҡобау ауылында (ул ауыл хәҙер юҡ, яндырылған) ҙур кәңәшмә була. Унда башҡа батырҙар менән аҡыл эйәһе, фарсы, ғәрәп телдәрен яҡшы белгән Бәпәнә абыҙ Төрөпбирҙин, йорт старшинаһы Туңғатар Ҡуркасыҡов та була. Ҡуркасыҡ — Туңғатар ауылына нигеҙ һалыусы. Күп һуғышҡандан һуң, бер ерҙән дә ярҙам булмағас, ҡан ҡойоуҙы артабан туҡтатыу өсөн Йосоп батыр ҙа, һуңынан Бәпәнә абыҙ ҙа баш һала. Бәпәнәне карателдәр оҙаҡ эҙләй, таба алмай. Улар бер көндө Кинйәкәйгә, Бәпәнәнең Хәйҙәр исемле кейәүенә килеп инә. Бәпәнә үҙ йортонда ат егеп торған була. Карателдәр килеүен күргәс, ул атын тиҙ генә туғарып, тәртәләрен ел ҡапҡа аша үткәреп атты тыштан егә лә, арбаға ултырып атты ҡыуа икән. Ҡаҡса, оҙон буйлы, аҡ тун кейгән кешенең был ҡыланышын күргән карателдәр аптырай, был кешегә «етмәй икән» тип уйлай. «Бәпәнәне күрмәнеңме, ҡайҙа бараң?» тип һорайҙар тылмас аша. Бәпәнә: «Война, ә мин соль», — тип яуап бирә. Йәнәһе, тоҙға бара. Ул саҡта тоҙҙо Ҡаҙаҡ далаһы яғынан ташыған булалар. Был кеше иҫәр икән тип, карателдәр сығып китә. Абыҙ улар артынан көлөп ҡала.

Бәпәнә тиҙ генә бирелмәй. Мандар Ҡарабаев, Төлкөсура батыр менән берлектә Көнгөр, Красноуфимск, Бөрө янында һуғыша. Өфөлә, хәҙерге Ғафури районындағы Табын ҡәлғәһе янында карателдәр менән ҡылыс тоталар (һуғышалар мәғәнәһендә). Кесе Йөҙ ханы Әбелхәйергә ярҙам һорап ебәрелгән сапҡындарҙан хәбәр юҡ та юҡ. Һуғыш һүрелә төшкәс кенә, төп яуҙар үткәс кенә килә ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер.

Ҡалҡан күле буйына йыйыла халыҡ. Бик күп йылҡы һуйыла. Әбелхәйер хан туй менән барындарҙың Миңзифа исемле ҡыҙына өйләнә лә, урыҫтар менән һуғышыуҙан янтайып ҡайтып китә. 1738 йылдың йәйендә, буғай, Бәпәнә абыҙ, Мандар һәм Төлкөсура батыр Мейәс йылғаһының башы тирәлегендә полковник Арсентьевтың өс меңлек ғәскәрен ҡыйрата. Уны Сыбаркүлгә тиклем баҫтыралар. Бер төркөмө ҡәлғәгә йәшеренеп ҡотола. Ҡәлғә ҡамауға алына. Күрәһең, Төлкөсура батыр шул һуғышта шәһит булғандыр, сөнки уның ҡәбере — бөгөнгө Мулдаш ауылы менән Көсөк ауылдары араһында.

Татищев башҡорт ихтилалының етәкселәренә яза яҙғанда Төлкөсураға язаны, күрәһең, уның шәһитлеген белмәй яҙған, йәки ул батша алдында яҡшатланыр өсөн: «Төлкөсура ла тотолдо», — тип ялған хәбәр ебәргән. Минзәләлә Төлкөсура урынына икенсе бер ихтилалсыны язалағандар. Төлкөсура батырҙың ҡәбере Мулдаш менән Көсөк ауылдары араһында, тип һөйләй торғайны Хаммат бабай Уразаев. Төлкөсураның ҡәберен Һөйөндөк ауылы кешеһе Харис Камалов һәм башҡа оло кешеләр белә ине.

Бәпәнә абыҙ 1737 йылдың ҡышында ғына властар ҡулына эләгә. Уның ауылы Кинйәкәй нигеҙенә тиклем яндырыла. Ҡатындарын, балаларын урыҫ әфисәрҙәренә мәңгелеккә ҡоллоҡҡа бирәләр. Был Сенаттың башҡорт эштәре буйынса комиссияһы начальнигы А.И.Румянцевтың бойороғо буйынса эшләнә. Бәпәнә Төрөпбирҙиндың буйға етеп килгән кесе ҡыҙын ғына йәшереп, был бала уның аҫырауы ине, тип алып ҡалалар. Бына ошо үкһеҙ етем ҡалған ҡыҙ балаға арнап сығарылған да инде «Кинйәкәй» (кинйә ҡыҙ) йыры:

Аҡлы ла күлдәк биҙәкәй,
Кейһә кейер уны Кинйәкәй.
Кинйәкәй өсөн кемдер көйһә,
Көйһә көйөр ғәзиз инәкәй.

Ары ла оса ҡоба ҡаҙ,
Бире лә оса ҡоба ҡаҙ.
Ауыҙына ҡапҡан баҡыр ҡумыҙ,
Илап, йырлап тора матур ҡыҙ.

Моғайын, был йырҙың һүҙҙәре күп булғандыр, үкенес, әле улар миңә билдәһеҙ. Ә халыҡ араһында өҙөм-йыртым һүҙҙәре әлегәсә йәшәй. Бергәләп тулыландырһаҡ, сауаплы эш башҡарыр инек. Үрҙә яҙылған ваҡиғаларға бәйләнеше булмаған куплеты ла бар:

Ат урлар инем бур булһам,
Ҡыҙ урлар инем ҙур булһам.
Тәҙрәм асып, сас бау ишеп,
Ултырыр инем, матур ҡыҙ булһам.

Был кемдеңдер Кинйәкәйгә һоҡланып ҡарау тойғоһомо? Бәлки, Кинйәкәй кеүек буй еткереп килеүсе йәш тай-тулаҡтың тойғоһолор?..

«Кинйәкәй» йырының беҙгә билдәле һуңғы куплетында уға ҡарата мөхәббәт тойғоһо кисерештәре сағыла:

Туғай ҙа буйы тал башы,
Тал башы ла тиһәм, яр башы.
Яр башы ла тейеп таянған инем,
Кинйәкәй ҙә матур янбашы...

## «Сиғандар»

Кинйәкәй кеүек ауыр яҙмышлы тағы ла бер ҡыҙҙың яҙмышы «Сиғандар» исемле йыр-бәйеттә сағыла. Бәлки, уны икенсе исем менән дә белеүселәр барҙыр? Миңә ике башҡорттоң ҡыҙҙарын кәрттә отторғаны билдәле. Береһе — Үҫәргән ырыуынан Мостафа мулла. Ул Зөлхәбирә исемле ҡыҙын католиктарға кәрттә отторноп, кәрт һүрәтенә кереп ҡалған. Сөнки кәрткә Европалағы иң ҙур отошло йәки оттороусы уйынсылар кергән. Кәрттәге сәллә һалып торған мосафир мосолман башҡорт Мостафа булыр. Был «Зөлхәбирә» йырында асыҡ сағыла:

Мостафа ла мулла бай икән,
Ун икенән кәртә тотторған.
Бай булһа ла аҡылы һай икән,
Кәрттә уйнап ҡыҙын отторған.

Икенсеһе уның Мәхмүт бай була.

**Сиғандар бәйете**

Сиған, сиған, тинегеҙ ҙә,
Сиған өсөн үлдегеҙ ҙә,
Эй алла, йөрәгем...
Сиған кәрттә отоп алғас,
Тәүбә, тәүбә, тинегеҙ ҙә,
Сиған мине отоп алғас,
Тәүбә, тәүбә, тинегеҙ шул.
Апарҙылар, ҡуйҙылар ҙа,
Таштан ҡойма һалдылар шул,
Эй алла, йөрәгем...
Туйы һимеҙ булһын тейеп,
Ата сусҡа һуйҙылар ҙа,
Ашамайым, тигән инем,
Муйыныма бысаҡ һалдылар шул.
Аҫыл камзул keләттә лә,
Алтын беләҙек беләктә лә,
Эй алла, йөрәгем...
Асайым тиһәм, асҡыс юҡ та,
Асҡыс Әпкәй ҡулында ла,
Мәхүбә сиған ҡуйынында шул.
Мәхмүт байҙың ҡапҡаһында
Утыҙ ике сыйырсыҡ та,
Эй алла, йөрәгем...
Сиғандарҙың ашағаны
Ҡаты-ҡото ҡыйырсыҡ та,
Сиғандарҙың ашағаны
Ҡаты-ҡото ҡыйырсыҡ шул.
Муйынымдағы гәрәбәмде
Өҙәмен дә теҙәмен шул,
Эй алла, йөрәгем...
Сиған йыраҡ алып ҡасҡас,
Һағынһам да түҙәмен шул,
Һағынһам да түҙәмен шул...

**«Көйөлдө»**

Был йырҙы мин 1966 йылда мәжлестә атайым Ильясов Мөжәүир Абдулфән улынан (Ҡорама ауылы) һәм Һөләймән ауылында Латипов Таһир ағай Талха улынан ишеттем һәм яҙып, отоп алдым. Мин ул ваҡытта Мәскәүҙә Тимирязев исемендәге ауыл хужалығы академияһында уҡый инем. Шул уҡ йылдарҙа Гнесиных исемендәге институтта Башҡортостандан бер төркөм студенттар уҡыны. Хәҙер улар барыһы ла билдәле йырсылар, сәнғәт белгестәре. Шулар араһында ерҙәшем, йырсы Нажиә Аллаярова ла бар ине. Беҙ, Башҡортостан студенттары, йыш ҡына бергә йыйылышып төрлө мәҙәни кисәләр үткәрҙек. 1966—1969

йылдарҙа Мәскәүҙәге Башҡортостан ерҙәшсәнлегенең рәйесе булдым. Шул осорҙа «Көйөлдө» йырын йырсы Нажиә Аллаяроваға өйрәттем. Шул уҡ йылды композитор Абрар Ғабдрахманов ул йырҙы нотаға һалды һәм «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫтырып сығарҙы.

Яҙ миҙгелкәйҙәрен шунан beləм,
Һыҙғырышып оса көйөлдө.
Һағынғанда, дуҫым, бер йырларһың,
Отоп алсы ошо көйөмдө.

Һауаларҙа осҡан, эй, яғылбай
Ҡыйғас-ҡыйғас оса ем тапмай.
Ир-егеткәй йөрөй илдән-илгә
Һөйөргә лә үҙенә йәр тапмай.

Иртә генә тороп тышҡа сыҡһам,
Көйөлдө ҡош килә һыҙғырып.
Сәс бауҙарын һалып биштән үреп
Үҙ еңгәйем килә лә ҡыҙ булып.

Юл буйҡайҙарында йүгереп уйнай
Аяҡкайҙары ҡыҙыл күгәрсен.
Уңған ғына йәрҙең ҡуйынында
Бөгәрләнеп ятып үләрһең.

Һауаларҙа осҡан ике ҡоштоң
Берәүҙәре бәйле, береһе буш.
Ятайым да тиһәм, эй, күңелем буш,
Уяныпҡай китһәм, ҡуйыным буш.

Кирсәнәй ҙә менән, эй, Турсанай
Тибен тибә тауҙың үңерендә.
Ниҙәр генә килеп, ниҙәр китмәй
Ир-егеткәйҙәрҙең дәүерендә.

Егет кенә бул һин, егет бул һин,
Көмөш таҡтыр ҡайыш йүгәнгә.
Күп дошмандар мине күрә алманы
Үҙҙәренән өҫтөн булғанға...

Йырҙың һүҙҙәренән күренеүенсә, был йыр аныҡ тарихи ваҡиғаға нигеҙләнеп сығарылмаған. Йөкмәткеһендә, бер яҡтан, тормоштоң ауырлығы сағылһа, икенсе яҡтан, бәхетһеҙ мөхәббәт хис-кисерештәре төҫмөрләнә.

**«Көйөлдө»**
(икенсе вариант)

Был йырҙы Учалы районы Малай Муйнаҡ ауылынан Абдрахман Әйүпов Рәфҡәт Әйүповҡа 1971 йылда яҙып ҡалдырған.

Ап-аҡ та ғына, ап-аҡ, эй, ағуна
Ағын һыуҙарҙа ла ҡағына.
Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер
Әйләнепкәй килһәсе тағы ла.

Билгенәмә быуған ефәк билғау
Билгенәмдә йөрөп туҙһа икән.
Күк сәскәләй атҡан, эй, йәш ғүмер
Уйын-көлкө менән уҙһа икән.

Йылтыр-йылтыр ғына уттар яна,
Юлаусынан ҡалған бер күмер.
Туған дуҫ-иш менән йыйылышып
Ултырыуҡайҙары бер ғүмер.

Еккән генә атым, эй, туры-кир,
Менгән генә атым ҡара-кир.
Уйнайыҡ та, дуҫтар, ай, көләйек,
Берәм-берәм тарта ҡара ер.

Саҡыра ла, кәкүк, эй, ҡаршымда,
Ултырып саҡыр сауыл башына.
Мин үлһәм дә, кәкүк, һин онотма
Ултырып саҡыр ҡәберем ташына.

**Ирәмәлкәй**

Алыҫтарҙан ағарып, эй, күренгән
Иҙел башы Ирәмәл тау микән?
Күрмәгәнкәйемә бик күп булды,
Ҡалған ағай-энем һау микән?

Ирәмәлкәй өҫтө, эй, өс ҡайын,
Береһен ҡырҡһаң, икеһе ҡуш ҡала.
Китәм инде йыраҡ яу ҡырына,
Йәнекәйем, ҡуйының буш ҡала.

Билдәремде минең шул талдыра,
Ҡайыш баулы ҡылыс бәйләһәм.
Аҡ ҡуйҙарҙан ҡорбан салыр инем,
Тыуған ергә ҡайтып йәйләһәм.

Ирәмәлкәй тауҙың көн битенән
Ун ике йылға аға сылтырап.
Һағыш баҫты микән йөрәгемде
Күҙ йәштәрем һарҡа йылтырап.

Билдәремә бәйле ҡылысымдың
Турғай башлы икән һаптары.

Зиннәте юҡ икән илдәренең,
Ҡыу далалар икән яҡтары.

Уй буйҡайҙарының нәҙек талын
Ҡаҙ ояһы итеп үрәйем.
Сит ерҙәрҙә яуҙа күп йөрөнөм,
Үҙ еремә ҡайтып үләйем.

Оло Табын ырыуының иң ҙур, иң ҡеүәтле ырыуҙарының береһе — Барын. Бөгөнгө көндә ул үҙенең иң яҡын ҡан ҡәрҙәше ҡара-табындар менән аралашып, нигеҙҙә бер тармаҡты тәшкил итә. Уларҙың боронғо ерҙәре башҡорт ҡәлғәһе Талҡала аша үтеп, Аят йылғаһына теркәлеп, Тубыл йылғаһы ярын сикләп, Исәт йылғаһын етеп Урал тауҙарына боролған. Унан Урал һырты буйлап кире Ағиҙел йылғаһы башынан ырыуҙаш туғандары — тиләүҙәрҙең еренә килеп төртөлгән.

1798 йылда Башҡортостан менән идара итеүҙә кантондар системаһы индерелгәс, был ерҙәр нигеҙҙә 1—6-сы кантондар ҡарамағында була. Әммә кантондар һаны үҙгәрә. Мәҫәлән, 4-се кантон икегә бүленеп, «Загорный башкирский кантон, четвертый» тип атала. Хәҙерге Силәбе өлкәһенең Уй районы икенсе була. Башҡорт ғәскәренең 18-се полкы тик «Загорный башкирский кантон» кешеләренән тора. Казак армияһының төп өлөшөн тәшкил иткән башҡорт атлы алайҙары (полктары) боронғо йоланы ташлай алмай. Һәр алай үҙенең әләмен (байрағын) булдыра. Хәрби хәрәкәт ваҡыттарында был әләмдәр рәсми танылыу тапҡанмы, юҡмы, миңә билдәһеҙ. Әммә шул замандарҙың аманаты булып ундай әләмдәрҙең береһе беҙҙең ваҡытҡа тиклем килеп еткән. «Ҡулдан һуғылған беше киндер туҡымаға төшөрөлгән һүрәт ине. Төҫө һары, оҙонлоғо 90х60 сантиметр самаһы. Уртаһында — Ҡояш. Нур уҡтары әләм ситенә етә. Ситтәре сасаҡлы. Ҡояш эсендә береһе өҫтә, береһе аҫта ике тау. Өҫтәгеһе — Тәңре Хан тауы, ә аҫтағыһы — Ирәмәл», — тиер ине Һөләймән ауылынан Усман бабай.

Тәңре Хан Алтайҙа Тән-Йән (ҡытайса — Тянь-Шань) тауҙарының бер түбәһе булырға тейеш. Тимәк, Табын ырыуының боронғо ере — Алтай, Тән-Йәндән Уралға, Ирәмәлгә тиклем йәйрәп ятҡан башҡорт далаһы. Ә уның моңо ла, йыры ла бихисап.

Ололарҙан миңә «Ирәмәлкәй» йырының тарихын аныҡ ҡына һөйләп биреүсе булманы. Әммә был йырҙы нигеҙҙә тик Ҡорама ауылы ҡарттары йырланы.

Инәйемә ике туған тура килгән Рустанов Барый бабай, Ҡорамшин Ғаттар һәм Ҡорамшин Һарун бабайҙарым, атайым Мөжәүир Ильясов, Моратшин Мәүлитбай еҙнә, Ибраһимов Изахетдин бабайҙар ҡайһы береһе «Ирәмәлкәй» тип, ә һуңғы икеһе «Алыҫдин» тип йырлар ине.

Йырҙың ысын исеме, һис шикһеҙ, «Ирәмәлкәй» һәм уның Барын ырыуы халҡы тарафынан сығарылыуы бәхәсһеҙ. Йырҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, ул — яуға киткән яугирҙың тыуған илде һағыныу йыры. «Зиннәте юҡ икән илдәренең, ҡыу далалар икән яҡтары» тигән юлдар башҡорт һуғышсыһының Дәһште-Ҡыпсаҡ далаһында яуҙа булыуын төҫмөрләтә. Нисек кенә булмһын, был йыр беҙгә быуаттар төпкөлөнөң зиннәте!